***“Илһам шишмәләре – 2011”***

***Төҙөнө: Исламова З.Х.***

*Сценарий*

**1-се ал.бар.:**

*Хәйерле көн хөрмәтле ҡунаҡтар, уҡытыусылар, уҡыусылар. 9 май Еңеү көнөнә бағышланған сарабыҙҙы асыҡ тип иғлан итәбеҙ.*

**1-се ал.бар.:**

Һуғыш беҙҙе ҡолаҡтарҙан тартып,

Ваҡытынан алда өлгөрттө:

Кистән бала итеп йоҡлатты ла

Таң атыуға инде ил итте… (сәхнә асыла)

*Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы ветерандарыбыҙ менән таныштырып китергә рөхсәт итегеҙ.*

1.______________________________________________________________________________________________________________________________________________________

2.__________________________________________________________________________________________________________________________________________________________________________________

3.__________________________________________________________________________________________

4.__________________________________________________________________________________________

5._________________________________________________________________________________________

**1-се ал.бар.:** Ҡунаҡтарҙы сәләмләү һүҙе, Бәләбәй ҡалаһы Башҡорт гимназия-интернатының директоры, ________________________бирелә. Рәхим итегеҙ!

“Сыңрау торна” моңо уйнай…

**2-се ал.бар.:** Бөгөнгө сарабыҙ Ватан һуғышы башланыуға 70 йыл тулыуға һәм һуғышта ҡатнашыусы яугир шағирҙарға бағышлана.

***3 күренештә драма башлана.***

***“Шиғырҙары аша әйләнеп ҡайттылар...”***

***Сәхнә биҙәлеше:*** *ҡайын, муйыл ағастары (ҡара емештәре менән), тимер каска, исемһеҙ ҡәбер, каска муйыл ботағында эленеп тора, муйыл төбөндә эскәмйә, эскәмйәлә сәскә гөлләмәһе ята*

Ҡатнашалар:
Һуғышта ҡатнашҡан ҡарт
Хәниф Кәрим
Төхфәт Морат
Мостай Кәрим
Рәшит Назаров
Мәлих Харис
Яҡуп Ҡолмой
Батыр Вәлид
Муса Ғәли
Муса Ғәлиҙең һөйгән ҡыҙы
Мазһар Абдуллин
Ғәйнан Әмири
Ҡыҙҙар
Егеттәр
2 пионер ҡыҙ

**1 – се күренеш:**

*Сәхнә ябыҡ. Талғын ғына музыка яңғырай. Сәхнә асылыуға 70 йәштәге, шинель, кирза итектәр кейгән ҡарт эскәмйәлә, таяҡҡа ике ҡулы менән*

*таянып, исемһеҙ ҡәбер төбөндә, офоҡҡа ҡарап уйға ҡалған. Сәхнә асылыу менән ҡарт Рәшит Назаровтың "Билдәһеҙ һалдат" тигән шиғырын яттан һөйләй башлай:*

Муйыл ботағында каска... каска...
Ҡан аралаш туты – боронғо.
Ҡайҙа һуң һеҙ – Днепр батырҙары?
Кем онотор утлы йырынды?!
Муйыл, муйыл... Ҡоштар моңо һеңгән
Ошо ерҙән, - беләм, мин беләм, -
Шаулап уҙҙы тарих ут эсенән,.
Үлем менән йәшәү өҫтөнән.
Бында ҡәбер. Билдәһеҙ ир йоҡлай.
Ҡан һеңешкән утлы ул йылды –
Атакаға ҡалҡҡас унынсы ҡат,
Еңеү килгәс, егет йығылды,
Ҡосағына алып муйылды.
Билдәһеҙ ир йоҡлай. Исемһеҙ ир...
Исемеме уның юҡ ине!
Ул да беҙҙең кеүек уйсан ине,
Ул да хиссән, ул да ут ине...
Кемдәр бында? Кемдәр унда – алыҫ?
Ҡайҙа улар – өлкән дуҫтарым!?
Атакала кеүек улар һаман,
Ташламаған кеүек постарын.
Быны – бына ҡайтып килерҙәр ҙә,
Шау – шыу ҡалҡыр төҫлө тирәлә.
...Көтөп арыған төҫлө, моңһоу – моңһоу
Ел яйына каска тирбәлә...
Тып – тын, тып – тын, тып – тын тирәлә...
Сәскә ата муйыл һәр яҙ һайын,
Кем өсөн һуң, әйтсе, кем өсөн?
Сәскә ата муйыл... йылдар еле
Килтерерме көткән кешеһен?
Һәр яҙ һайын муйыл сәскә ата,
Көтә, көтә... Тик көҙ ҡалҡа ла,

Ҡайғыһынан ҡара янған емеш
Тып – тып... тып – тып ҡойола каскаға...
Исемһеҙ ир йоҡлай... Кем исемһеҙ?!
Һуң һүҙ әле кемдәр хаҡында?!
Улар исememe ни яңғырамай
Ватан исемен әйткән сағында!
Минең исем, һинең исемең, эшең,
Тыуыу, йәшәү – улар исеме...
Кем, исемһеҙ, тиер, үлгәндә лә,
Үлгәндә лә тере кешене!
...Днепр яры. Ҡоштар моңо. Һуҡмаҡ.
Күктә йәйғор – алтын баҫмала.
Япраҡ аша, тормош үҙе һымаҡ,
Муйыл күҙле ҡараҡаш баға...
Тып – тып... тып – тып... шул күҙҙәрҙәй ҡара
Емеш ҡойола, ҡойола каскаға...

*Һөйләп бөтөүгә һағышлы моң яңғырай. Талғынланған ваҡытта ҡарт дауам итә:*

- Әәәәй, ғүмер тигәндәре! Һиҙмәҫтән генә үтә лә китә икән! Ә хәтирәләр - юйылмай! Юйылмай ғына түгел, бөтә ғүмеребеҙ буйына эйәреп килә. Айырыуса нескә күңелле шағирҙарға, утлы яу йылдарын иҫкә төшөрөү еңел түгел. Күпме ауыр саҡрымдар үтелгән?! Күпме ауыл – ҡалалар азат ителгән?! Күпме еңеү шатлыҡтары, йән дуҫтарҙың үлем – ҡайғылары кисерелгән, (ҡәбергә күрһәтеп, әсенеп ), Ер – әсәнең ҡосағына исемһеҙ ҡәберҙәр һыйынған!...
- Эййй! Һуғыш башланғанға 70 йыл да тулып килә бит.... бөгөнгөләй хәтеремдә: беҙ - йәштәр, яҡты киләсәккә ышанып, уйнап – шаярып ҡына йөрөп яткан саҡтар... Салт аяҙ көн. Бесән өҫтө.... (уйға бата)

  *Ошо моментта бер төркөм йәштәр күренә, бесән сабалар... бер ҡыҙ менән егет һөйләшеп торалар...*

  *Хәле бөтөп бер егет йүгереп инә:*
- Дуҫтар, ишеттегеҙме? Гитлер Рәсәйгә ҡаршы һуғыш асҡан... (Левитандың радионан әйткән һүҙҙәре яңғырай, бөтәһе лә тынып ҡала,

ҡайһыларының ҡулдарынан ураҡтары төшөп китә, ҡыҙҙар илаша башлай)

*Мостай Кәрим:*

- Беҙ, Ватанды фашистарҙан һаҡларға, яҡларға тейешбеҙ, дуҫтар! Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!

  Йыуырмын мин фашист ҡаны менән
  Илем күкрәгенең яраһын,
  Ҡайырылмаҫ ҡаты дауылдарҙа
  Үс һәм нәфрәт биргән ҡанатым.
  Сал ҡартлығын һаҡлап ҡарттарымдың
  Һылыуҙарын һаҡлап илемдең,
  Бөйөклөгөн һаҡлап Уралымдың,
  Гүзәллеген һаҡлап иҙелдең.
  Тыуасаҡ таң, тыуасаҡ яҙ өсөн,
  Яҙын япраҡланыр гөл өсөн,
  Тыуыр балам, йырланыр йыр өсөн.
  Йыр өсөн һәм тыуған ер өсөн –
  Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!

(“Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!”)

- Кем минең менән!? Әйҙәгеҙ, тыуған илде азат итергә беҙ бурыслыбыҙ! (сыға башлай)

*Хәниф Кәрим:*

- Мостай, көт, мин дә фронтҡа!
- Дауылдан да көслө асыу ҡупты
  Йөрәгендә азат халҡымдың,
  Мең ҡат көслө булып балҡыны
  Тыуған илде һөйөү ялҡыны!

(“Асыу йыры”)

*Мазһар Абдуллин:*

- Ватан!
  Һәр бер кеше һине яҡлау өсөн
  Күтәрелде изге көрәшкә,
  Миллион күңелдәргә яҡын исем –
  Ватан исеме беҙҙең йөрәктә!

Тыуған илдең намыҫын һаҡлауҙан да
Артыҡ бәхет бармы донъяла?
Ватан – әсә. Уның йәшәүе өсөн
Ҡыҙғанмайбыҙ ҡайнар ҡанды ла! .....
*Ғәйнан Әмири:*
Китәм мин бөгөн фронтҡа –
Иң оло һынау көнөм.
Тып – тынысмын, әйтерһең дә,
Һабанға сығам бөгөн.
Тыуған ерем, һиңә ҡала,
Йырланасаҡ йырҙарым,
Һөйөләсәк һөйөүҙәрем
Һәм тыуасаҡ улдарым...
Хуш, һау бул, Салауат ере,
Бәлки, һуңғы күреүем
Ятып ҡалһа ла һөйәгем,
Тере ҡайтыр һөйөүем!

*Был ваҡыт “Вставай, страна огромная!” йыры ишетелә. Егеттәр бер – бер артлы сыға башлайҙар, ҡыҙҙар ҡул болғап:*
- Беҙ һеҙҙе еңеү менән көтөрбөҙ!

*Һөйләшеп торған егет (Муса Ғәли) менән ҡыҙ ғына ҡала, улар бер – береһенә ант әйтешә. Муса Ғәли:*
- Онотма һин изге шул минутты,
Сикһеҙ ауыр юлдар
Тора алда миңә үтергә.
Тыуыр көндәр шауын күрер өсөн,
Иркәм, икәү бергә
Бар үлемде еңеп ҡайтырмын!

Ҡыҙ хушлашыу йырын йырлай, ҡульяулығын бүләк итә:
- Был бүләгем һиңә, йәнем! Һине яуҙа һаҡлар ул! Һау бул, иҫән генә йөрөп ҡайт!

*Егет сығып китә, шаршау ябыла*

**2 – се күренеш:**

*Шаршау асылғанда усаҡ тирәләй фронтовик - шағирҙар теҙелеп ултырғандар, ҡайһы берҙәре ҡырын ятҡан, кемдер хат яҙа, кемдер ҡурай тарта, бөгөнгө алыш тураһында хәбәр алышалар:*

*Муса Ғәли:*

- Иптәштәр, нисек бөгөн беҙ фашистарҙы ҡырып һалдыҡ, әәә!? (өмөт менән) Бәлки һуғыш бөтөүгә лә баралыр?! Быйылғы йәйге көндәрҙе тыуған яҡтарҙа ҡаршы алырбыҙ, һөйгәндәр менән осрашырбыҙ әле, алла бойорһа! (хыялланап)

*Батыр Вәлид (ҡурайын тотҡан):*

Атыштан һуң була тыныс саҡтар,
Айырылмайым ике дусымдан.
Унын береһе мылтыҡ, береһе ҡурай,
Береһе янда, береһе усымда...
Көрәш йылының бер шат миҙгелендә
Байрам булыр беҙҙең урамда.
Оккупанттар тая өндәренә:
Әжәл яҡын инде уларға!

*Мостай Кәрим:*

- Батыр дус, әйҙә тартып ебәр әле бер ҡурайыңды, Урал тауҙарын, мәғрүр ҡаяларҙы, Ағиҙел һылыуҙы күҙ алдында кеүек күрербеҙ бәлки, һағындырҙыыыыы!!!!!

  *Батыр Вәлид ҡурайҙа уйнай. Бейеү көйҙәрен һыҙҙырып ебәргәс, берһе түҙмәй бейеп ала.*

  Шул ваҡыт бер егет хаттар тотоп, йүгереп, хәле бөтөп килеп инә:

- Һөйөнсө, хаттар килде! Кемгә хат бар, шул шиғыр һөйләй!

  Бөтәһе лә уны уратып ала, һәр кем хат алырға теләй, үҙенә булмағас, күңелһеҙ йөҙ менән кире урынына барып ултыра.

  *Егет:*

- Яҡуп дус, хат һиңә! Әйҙә инде, шиғырыңды һөйлә!

  *Мостай Кәрим:*

- Тукта инде, асып уҡыһын, ҡыуанһын башта!

  *Яҡуп Ҡолмой хатты тиҙ генә уҡып сыҡҡан була, иң ҡыуандырғаны, хат араһынан һөйгәненең фотоһүрәте килеп сыға. Һүрәтте йөрәк тирәһенә ҡуйып, ул һөйләй башлай:*

Ҡайнар саф мөхәббәт хисен аса
Рәсемдәге иркә көлөүең.
Шуға ла мин теләйем көрәш аша
Килтерергә данын еңеүҙең.
Мин торормон һинән йылы алып,
Ниндәй ҡурғаш пуля яуһа ла.
Тик бел, йөрәгендә урын табып
Ҡалғым килә, үлем алһа ла!
*Егеттәр:*
- Һай, афарин! Бына бит нисек ҡанатландыра беҙҙе хаттар! Бөтәбеҙ ҙә иҫән – һау ғына ҡайтһаҡ ине шул!
*Хәниф Кәрим, фуражкаһын һалып, ике ҡулына тотоп, ҡәбер янына килә:*
- Бына бөгөн дә беребеҙҙе юғалттыҡ, шәп дуҫ һәм буласаҡ шағир ине беҙҙең Мәхәммәт Хәйҙәров дуҫ!
- Йәшәүҙең һуңғы һулышын, ҡанын
Иле өсөн бирҙе был йөрәк;
Үлемдә лә бөйөк тормош бар бит,
Үлем үҙе үлмәү килтерһә!
- Эйе, яңы ошо шиғырын һөйләгән ине бит, ә хәҙер үҙе тураһында ла шулай тип әйтәбеҙ! Беҙҙең күңелдәрҙә мәңге ҡалырһың, дуҫҡай. Тыныс йоҡла! Беҙ еңеп ҡайтырбыҙ әле, шулай бит, иптәштәр!
*Егеттәр:*
- Эйе, еңербеҙ! (йүгереп сығып китәләр)
Төхфәт Морат ҡәбер янында:
- Хуш бул, дуҫҡай, ҡәбереңә бәлки,
Һуңғы тапҡыр килеп тормамдыр.
Ишетәһеңме, позициялар буйлап,
“Һөжүмгә!” – тип сигнал уйналды.
Ғәфү ит, дуҫҡай, ҡәбереңде
Сәскә менән биҙәп торманыҡ.
Һәйкәл өсөн баш осоңа тағы
Йондоҙ – фәлән яһап ҡуйманыҡ.
Залп бирмәнек. Һиңә тигән залптар
Дошман йөрәгенә атылыр.
Һеҙ ҡорбандар өсөн иң ҙур һәйкәл –

Еңеү тигән һәйкәл ҡуйылыр!

("Дуҫ ҡәбере янында")

*Иң һуңғы булып Малих Харис:*

- Эй, ғүмерҙең һуңғы сәғәте,
  Һин миңә лә шулай күкрәп кил.
  Батырҙарын иҫкә алғанда,
  Онотмаһын мине лә тыуған ил! (сығып йүгерә)

*Шаршау ябыла.*

**3 – сө күренеш:**

*Беренсе күренештәге ҡарт урынында ултыра. Һаман шулай уйға батҡан. Янында 2 пионер ҡыҙ, һалдаттар, һәр ҡайһы уйға батҡан.*

*Ҡарт:*

- Эйееее, үтте ғүмер, аҡты һыуҙар! Һуғыштан да еңеп ҡайттыҡ! Ләкин яуҙа ятып ҡалған бик күп шағир йөрәкле батырҙарыбыҙҙың ҡәберҙәрен Ер әсә үҙ ҡуйынына һыйындырҙы. 22 июнь йыл һайын исемһеҙ ҡәбер янына киләм, бәлки һуғыш яланында ятып ҡалған Мөхәммәт, Мәлих, Төхфәт йәки Хөсәйен дуҫтарҙың ҡәберелер ул?! ( Ҡулына гөлләмә ала, тороп баҫа, фуражкаһын һала, ҡәбергә сәскә һала. Был ваҡытта 2 пионер ҡыҙ үҙҙәре яҙған һуғыш тураһындағы шиғырҙарын һөйләйҙәр). Улар һөйләп бөткәс ҡарт:
- Эй, тормош! Киләсәк быуын һуғышһыҙ донъяла йәшәһен, беҙ күргәндәрҙе башҡа бер кемгә лә күрергә яҙмаһын, тип теләйһем килә! Аяҙ иртәләр, таңдар атһын, хәйерле кистәр килһен, Ватаным – Башҡортостан мәңге йәшәһен!
- Торналар тауышы.....

  *Ҡатнашыусылар барыһы ла сәхнәгә сығалар*

**2-се ал.бар.:**

Башҡортостаныбыҙҙың танылған шағирҙары, яҙыусылары татыу, бер ғаилә булып, иңдәрен иңгә терәп Бөйөк Ватан йылдарында эшләгәндәр. Улар:

Хәниф Кәрим
Төхфәт Морат
Мостай Кәрим
Мәлих Харис
Яҡуп Ҡолмой
Батыр Вәлид
Муса Ғәли
Муса Ғәлиҙең һөйгән ҡыҙы
Мазһар Абдуллин
Ғәйнан Әмири

Шулай уҡ Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы һалдаттарыбыҙҙы бөгөнгө көндә иҫкә алып китеү ҙур әһәмиәткә эйә.

- **1-се ал.бар.:**
  Ҡәҙерле дуҫтар, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан һәм һәләк булып ҡалған яугир шағирҙарыбыҙ өсөн баҫып бер минут шым тороуығыҙ һорала.
  *Сәғәт таушы яңғырай*

*Шаршау ябыла.*

*Шул вакытта Миһранова Юлиә,7-се  класс укыусыһы шагирҙар тураһында ҡобайыр башкара.*

**2-се ал.бар.:**
Хөрмәтле ҡунаҡтар, уҡытыусылар, ҡәҙерле балалар. Ә хәҙер  кисәбеҙҙең тулҡынландырғыс минуттарының береһе  - милләттең күңелен, аҫылын байытыусы, йөҙөн донъя алдында, ғәләм алдында балҡытып күрһәтеүсе шәхестәр – килгән ҡунаҡтарыбыҙ менән серләшеү, уй – фекерҙәре менән бүлешеү ваҡыты ла етте.
*Экранда М.Кәримдең портреты күрһәтелә.*

**2-се ал.бар.:**

Сая бейенең һин, менеп бер саҡ

Упҡын өҫтөндәге ҡаяға.

Ҡурҡманым мин, була күрмәһен тип

Ошо саялығың заяға.

Күҙ алдыма ташландың һин бер көн

Тауҙан атылып төшкән ташҡынға.

Мәкерле һыу һине йотмаған тип

Хатта шик инмәне башыма.

Ил алдына сыҡһаң, мин тынысмын,

Һөйләмәҫһең ваҡты, яманды,

Изгеләрҙе яуыз яһамаҫһың,

Хаҡка сығармаҫһың ялғанды.

**1-се ал.бар.:** Мостафа Сафа улы Кәримов ошо саф күңелдән яҙған һүҙҙәрен Рауиль Төхфәт улы Бикбаевҡа бағышлаған.

*Экранда Р. Бикбаевтың  шиғыр юлдары.*

Һорауҙар:

2) Бала саҡта һәр кемдең дә үҙ хыялы була: кемдер космосҡа осорға хыяллана, кемдер йырсы булам тип хыяллана. Ә һеҙҙең бала саҡ хыялығыҙ кем булыу ине?

3)__________________________________________________________________________________________________________________________________________________________________

**1-се ал.бар.:**

Хөрмәтле, …………………………………………………………..Ә хәҙер һүҙ һеҙгә бирелә. Рәхим итегеҙ!

*Ҡалған ҡунаҡтарға шулай уҡ һүҙ бирелә һәм һорауҙар.*

***2-се алып бар.:*** Быйылғы “Илһам шишмәләре – 2011” шиғриәт бәйгеһенең еңеүсеһе, Башҡорт гимназия-интернатының 11 класс уҡыусыһы Йәмилова Айгөлгә һүҙ бирелә. Рәхим ит, Айгөл.

**1-се ал.бар.:**

Шулай уҡ беҙҙең Башҡорт гимназия-интернатында бына инде 7 йыл “Ҡаурый ҡәләм” түңәрәге эшләп килә. Был түңәрәккә бик күп һәләтле, шиғыр һөйөүсе балалар йөрөйҙәр. Уларға һүҙ бирәйек. Рәхим итегеҙ.

*Уҡыусыларҙы тыңлап китеү.*

**2-се ал.бар.:** Рәхмәт ҡунаҡтарыбыҙға, шундай бай йөкмәткеле сығыштары, уҡыусыларыбыҙҙың һорауҙарына тулы яуаптары өсөн.

**1-се ал.бар.:**

Шағир – Бер тамсыһы икән үҙ халҡының,

Тамсы һөйләр Диңгеҙ хаҡында.

Шағир –шаңдағы ул заманының

Һәм көсө лә уның халҡында.

**2-се ал.бар.:** Талантлы, ҡаһарман, моңло йөрәкле, һанап бөткөһөҙ игелекле шағирҙар халыҡтың тарихында ғына түгел хәҙерге көрәштең алдынғы сафында. Хөрмәтле өлкән ижади дуҫтарыбыҙ, һеҙҙең менән күрешеү, аралашыу, ошондай бәйләнештә булыу беҙҙең өсөн оло бәхет.

**1-се ал.бар.:** Бөгөн беҙгә ошондай байрам бүләк иткәнегеҙ өсөн сикһеҙ рәхмәттә, иң изге теләктәр һеҙгә, ҡәҙерле ҡунаҡтарыбыҙ. Гимназия – интернаты уҡыусылары һәм уҡытыусылары исеменән бәләкәй генә бүләктәрҙе рәхим итеп ҡабул итегеҙ.

*Балалар бүләктәр тапшыралар*

***Музыкаль номер: Аҙнабаева Г., йыр яңғырай.***

**1-се ал.бар.:** Хөрмәтле ҡунаҡтар, бөгөн беҙ һеҙҙең менән киләһе осрашҡанға тиклем хушлашабыҙ. Һеҙҙең алдағы тормошоғоҙҙа, ижад юлығыҙҙа тик уңыштар ғына юлдаш булһындар.

**2-се ал.бар.:** Һау булығыҙ.